***Ғиниәт ҠУНАФИН,***
***филология фәндәре докторы,***
***профессор***

# Тарихи аңыбыҙ нигеҙе — рухи мираҫыбыҙҙа

Һуңғы йылдарҙа республикабыҙҙа Салауат Юлаев, Мифтахетдин Аҡмулла, Мостай Кәрим һәм башҡа арҙаҡлы ил улдарына арналған көндәрҙе дөйөм халыҡ байрамы кимәлендә уҙғарыу, халҡы, иле алдында ҙур хеҙмәт күрһәткән шәхестәрҙең, белем усаҡтарының, шулай уҡ ауыл-ҡасабаларҙың, ҡалаларҙың юбилейҙарын билдәләү, "Һаумыһығыҙ, ауылдаштар (яҡташтар)!" кеүек осрашыуҙарҙы ойоштороу күркәм бер традицияға әүерелә бара. Бында республикабыҙ етәкселегенең дә был сараларға ыңғай ҡарауы, хатта йүнәлеш биреп тороуы ла мөһим роль уйнай. Әйтәйек, һуңғы осорҙа бөтә Башҡортостан буйынса шәжәрә байрамдары уҙғарылыуы — шуның сағыу миҫалы. Бындай сараларҙың бөтәһе лә халыҡтың үҙ тарихын төплөрәк белеүенә, милли аңы, интеллектуаль-мәҙәни кимәле үҫешенә, рухи донъяһы байыуына булышлыҡ итә. Башҡортостандың Рус дәүләтенә үҙ ирке менән ҡушылыуына 450 йыл тулыу көндәре яҡынлаған һайын ошо мөһим сараларҙың әүҙемләшә, халыҡты илһамландырыусы, берләштереүсе системалы процесс төҫөн алыуы үтә лә ҡыуаныслы. Бында шуны ла ап-асыҡ әйтергә кәрәк: бөтә был процестың нигеҙ таштарын рухи мираҫыбыҙ, үткәндәге һүҙ сәнғәтебеҙ байлыҡтары тәшкил итә.

Мәшһүр мәғрифәтсе ғалим-әҙибебеҙ М.Өмөтбаевтың: "Аҫаба башҡортҡа өс нәмәне белеү фарыз: береһе — үҙеңдең сығышыңды, йәғни үҙ ырыуыңды белеү, икенсеһе — йондоҙҙарҙы исемләп аңлатыу һәм өсөнсөһө — хандар тураһындағы риүәйәттәрҙе һәм өләңдәрҙе белеү", — тигән һүҙе һәр беребеҙгә тиерлек мәғлүм. Ысынлап та, кешемен тигән кеше, нисек кенә булмаһын, үҙенең дә, халҡының да үткәнен барлап, бөгөнгө көн хәстәрлектәре менән йәшәй, киләсәккә ҙур өмөттәр бағлап, матур пландар ҡора. Йәшәйештең төп мәғәнә асылы шул өс ваҡыт арауығы, өс быуын бәйләнештәренең гармониялы төҙөлөшөндә бит. Ошо өс быуындың береһе генә күрһәтелгәндәрҙән ситләшһә лә, йәшәүҙең мәғәнәүи асылы, ижтимағи тормоштоң иҡтисади, сәйәси, социаль һәм мәҙәни гармонияһы боҙола. Шулай ҙа ошо ижтимағи-тарихи төҙөклөктө һаҡлауҙа һәм камиллаштырыуҙа ваҡыт "өстағанының" тәүге-

һенең — үткәндең әһәмиәте ифрат ҙур. Сөнки, нисек кенә булмаһын, бөгөнгө һәм киләсәк тормоштоң нигеҙе — үткәндә. Үткәнен, тарихи тамырҙарын белгән халыҡ киләсәккә реаль пландар ҡороп, тормошта ныҡлы урын алып йәшәргә ынтыла. Үткәнде өйрәнеү, уны тарихи һәм психологик йәһәттән дөрөҫ аңларға ынтылыу, халҡыңдың һәм илеңдең тарихи яҙмышындағы төрлө тенденцияларҙы, ағым-йүнәлештәрҙе белеү, арҙаҡлы шәхестәрҙең фиҙакәр эшмәкәрлектәре емештәре, уй-фекерҙәре менән ентекле танышыу, зиһен-күңелгә һеңдереү, тейешле һығымта яһау, фәһем һәм ғибрәт алыу — бөгөнгө тормошобоҙ камиллығының, киләсәк тормошобоҙ төҙөклөгө һәм матурлығының үтә лә мөһим сығанағы ул.

Кеше үҙ халҡының, тыуған ил-ҡороноң тарихын ни тиклем төплөрәк белһә, тамырҙарын тәрәнерәк һәм ентеклерәк күҙаллаһа, милли аң кимәле, мәҙәнилеге, төрлө халыҡ вәкилдәре араһында үҙ бәҫен белеүе лә шул тиклем юғарыраҡ була. Юҡҡа ғына йәмғиәттә тарихи аң, халыҡты, бигерәк тә уның киләсәге булған йәш быуынды, тарих аша тәрбиәләү тигән төшөнсә йәшәмәй. Тарихи үткәнен онотҡан йә уға вайымһыҙ ҡараған халыҡтың киләсәге өмөтһөҙ. Уға кешелек донъяһы аренаһынан төшөп ҡалыу хәүефе янай. Ошо уңай менән диалектика закондарына нигеҙ һалыусы оло фекер эйәһе Сократтың ябай ғына яңғыраған, әммә тәрән мәғәнәле “Үҙ асылыңды аңлап төшөн” тигән һүҙҙәрен иҫкә төшөрөү урынлы булыр. Уларҙы ул бынан 24 быуат (!) элек яҙып ҡалдырған.

Әйтергә кәрәк, “үҙ асылын аңлап төшөнөргә” ынтылмаған, туған халҡының граждандлыҡ тарихынан, рухи биографияһынан мәғлүмәте булмаған кешенең ысын патриот булыуы шикле. Шул уҡ ваҡытта үҙ халҡы яҙмышына битараф бындай заттың бүтән халыҡтарҙың тарихына, мәҙәниәтенә, милли асылына ихтирам менән ҡарауы ла, икенсе төрлө әйткәндә, ысын интернационалист булыуы ла самалы. Тарихтағы һәм тарихҡа ҡараштағы аҡ таптар, ғәҙәттә, кешеләр күңелендәге аҡ таптарға әүерелеүсән. Төплө һәм, әлбиттә, объектив тарихи аңлы, киң мәғлүмәтле, ҙур мәҙәниәтле кешенең генә рухи донъяһы бай, күңеле алсаҡ һәм инсанлы булалыр. Юҡҡа ғына тамырлының — ҡор-ырыуы, ырыулының уғы юғалмаҫ, фекерлененең, кәңәшлененең иле тарҡалмаҫ, тимәйҙәр бит. Ана шул тарихи тамырҙар, кешеләрҙе кәңәшләшеп эш итергә, алға барырға әйҙәр тарихи аң хаҡында боронғо Рим сәйәсмәне, ораторы, яҙыусыһы Цицерондың ошондай бер фекере бар: үҙ йәшәйешенең нигеҙе булған үткәнде, тарихи тамырҙарҙы белмәгән кеше ғүмере буйына бала хәлендә ҡаласаҡ.

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, теге йәки был халыҡты башҡалары тарафынан “бала хәлендә” тоторға, ә ҡулдан килһә, тарих аренаһынан алып ташларға тырышыу, манҡортландырып, ассимиляциялаштырырға ынтылыу һәр саҡ булған, хатта дәүләт сәйәсәте кимәленә күтәрелгән. Миҫал өсөн алыҫ китәһе түгел: тырышып-тырышып шундай сәйәсәтте, коммунистик идеологияны тормошҡа ашырыу арҡаһында, 100-ләгән халыҡтар йәшәгән СССР-ҙа үҙ милли аңын, милли йөҙөн юғалтыусылар,

ел ҡайҙа иҫһә, шунда ҡамғаҡ кеүек тәгәрәп йөрөүселәр ишәйгәндән-ишәйә барҙы; төрлө милләт вәкилдәренең айырыуса рустар менән ғаиләҡороуҙарына, исем-шәрифтәрен, хатта тыуып-үҫкән ауыл, ҡасаба исемдәрен руссаға яраҡлаштырып алмаштырыуҙарына, милли ғөрөф-ғәҙәттәрен, атай-олатайҙары традицияларын онотоуҙарына мәҙех йырланды, шул рәүешле тарихи аң кимәле менән "бала хәлендә"ге кешеләрҙән торған "берҙәм совет халҡы" тигән "милләт" барлыҡҡа килде һәм был тарихи "ҡаҙаныш" партия, дәүләт кимәлендәге документтарға, фәнни хеҙмәттәргә, дәреслектәргә теркәп ҡуйылды, киң мәғлүмәт саралары аша пропагандаланды. Һөҙөмтәлә, беҙ шуға барып еттек: милли ғорурлығыбыҙ булырҙай рухи ҡомартҡыларыбыҙҙы, арҙаҡлы шәхестәребеҙҙе онота, ата-олатайҙарҙың быуаттар һуҙымында формалашҡан, ваҡыт һынауҙарын үткән тормош тәжрибәләрен, этнопедагогикаһын, традицияларын һаҡламай башланыҡ, зат-ырыуҙы, тарихи тамырҙарҙы белмәү арҡаһында, хатта яҡын ҡәрҙәштәрҙең никахҡа инеүен йышайттыҡ.

Бына шулай "үҙ асылын аңлап төшөнөүҙән" (Сократ) ситләштерелгән, милли асылын белмәйенсә "бала хәлендә" ҡалған "берҙәм совет халҡы" дәүләтенең тарихи яҙмышы ла бала хәлендәрәк килеп сыҡты — интернационализмды ғына үҙәккә ҡуйып, фетишҡа әүерелдерә, милли тарихи аң, милли рухиәт проблемаларын онота барған, "берҙәм совет халҡы" хаҡында лаф орған һайын, дәүләттең берҙәмлек "йөйҙәре" эстән шытырҙап һүтелә барҙы. Халыҡтарҙың тарихи аңын томаларға, милли рухи-мәҙәни мәнфәғәттәрен тулыһынса ҡәнәғәтләндермәҫкә, тарихтың тәбиғи ағышы ҡанундарын кинәт үҙгәртергә, үҙеңсә яһарға тырышыуҙың нәмәгә алып килеүенә ғибрәтле һабаҡ булды "берҙәм совет халҡы" дәүләтенең, ҡатырға ҡағыҙҙан яһалған йорт кеүек, бик еңел тарҡалып, емерелеп китеүе.

Һуңғы йылдарҙа тарихыбыҙға ныҡлабыраҡ күҙ һалыуыбыҙ, ғөрөф-ғәҙәттәребеҙ, йолаларыбыҙ серҙәренә, үҙенсәлектәренә нығыраҡ төшөнөргә, ынғайҙарын аяҡҡа баҫтырырға, новаторҙарса үҫтерергә, рухи байлыҡтарыбыҙҙы мөмкин тиклем күберәк тупларға, системалаштырып, фәнни баһаларға, арҙаҡлы шәхестәребеҙҙең яҡты эҙҙәрен һаҡларға, ижад емештәрен пропагандаларға ынтылыуыбыҙ ана шул ғибрәтле хаталарҙан һабаҡ алыуыбыҙҙың, "балалыҡ хәленән" сыға, үткәндәргә ихтирамлы, бөгөнгөгә һәм киләсәккә иғтибарлы була барыуыбыҙҙың бер ҡыуаныслы күрһәткесе.

Был изге эштә һүҙ сәнғәтенең роле баһалап бөтөргөһөҙ. Ни генә тимә, ул — ижтимағи аңдың иң универсаль һәм энциклопедик формаһы, иҫ киткес бай танып белеү, әхлаҡи-этик тәрбиә биреү, эстетик зауыҡ формалаштырыу сығанағы. Мәҫәлән, Ҡол Ғәли, Сәйф Сараи, Салауат Юлаев, Мифтахетдин Аҡмулла, Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев, Мәжит Ғафури, Шәйехзада Бабич, Дауыт Юлтый әҫәрҙәре аша беҙ башҡорт халҡының XIII—XX быуат баштарындағы данлы ла, ҡанлы ла, ауыр ҙа тормошо, тарихи яҙмышы һәм ҡарашы, иҡтисади-сәйәси тормошо, социаль хәле, аң-белем һәм мәҙәни кимәле, художестволы-эстетик фекерләү, әхлаҡи-этик ҡараш кимәле, рухи ынтылыштары, ғөрөф-ғәҙәттәре, яҙма мәҙәниәте һәм башҡалар хаҡында бай мәғлүмәттәр туплай

һәм тейешле һығымталар яһай алабыҙ. Халҡыбыҙҙың тарихи үткәне, йәшәү рәүеше, донъяға ҡарашы, фәнни-ижади эҙләнеүҙәре хаҡында ҙур-ҙур хеҙмәттәр, трактаттар булмаған бер ваҡытта, бындай әҙәби сығанаҡтарҙың әһәмиәте бермә-бер күтәрелә.

Һүҙ сәнғәтенең башы — фольклорҙа. Уның эпос, ҡобайыр, тарихи йыр, тарихи бәйет, топонимик, этнонимик легенда һәм риүәйәт кеүек жанрҙарына ҡараған әҫәрҙәре халыҡ, ил тарихын яҡтыртыуҙа һәм халыҡта тарихи аң формалаштырыуҙа айырыуса әһәмиәткә эйә. Әйтәйек, мифологик характерҙағы “Урал батыр”, “Аҡбуҙат” ише эпостарҙа беҙ ата-олатайҙарыбыҙҙың ырыу ҡоролошо ваҡытындағы йәшәү рәүеше, донъяға ҡарашы тураһында бик ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр ала һәм һығымталар яһай алабыҙ. Ә инде “Алпамыша менән Барсынһылыу”, “Ҡуҙыйкүрпәс менән Маянһылыу”, “Иҙеүкәй менән Мораҙым” кеүек эпостарҙа, “Биксура”, “Аҡман-Тоҡман”, “Бошман-Ҡыпсаҡ батыр”, “Һуңғы һартай” ише легенда һәм риүәйәттәрҙә, “Ғайса улы Әмәт”, “Сура батыр”, “Тарғын менән Ҡужаҡ” кеүек хикәйәттәрҙә беҙ башҡорт илендә феодаль мөнәсәбәттәрҙең формалашыуы һәм үҫеүе, Алтын Урҙа ханлығының хакимлығы урынлашыуы, уның ваҡ ханлыҡтарға тарҡалыуы, уларҙың иҙеүенә ҡаршы халыҡтың көрәшеүе процесын асыҡ күҙ алдына баҫтырабыҙ. Ырыу-ҡәүемдәр, халыҡ берҙәмлеге, тыуған ер именлеге, милли-колониаль иҙеүгә ҡаршы көрәш темаһы, тамырҙарҙы барлау, ойошҡанлыҡ, тарихи аңды үҫтереү идеяһы уларҙың күбеһенең үҙәгендә торҙо. Топонимик, этнонимик (этногенетик) легендаларға, риүәйәттәргә, тарихи йырҙарға һәм бәйеттәргә килгәндә иһә, улар, исемдәренән үк күренеп тороуынса, тарихи үткәнебеҙҙе документаль, автобиографик теүәллек менән яҡтыртыуға дәғүә итәләр, беҙгә дөйөм идея-эстетик ҡараштар ғына түгел, бай фактик тарихи мәғлүмәттәр еткерәләр. Тап шуға ла был ҡомартҡылар бөгөнгө көндә әҙәбиәтебеҙҙә гөрләп үҫеп киткән, сағыу күренешкә әйләнгән тарихи прозаның эпосҡа ҡарағанда ла ҙурыраҡ һәм ныҒыраҡ нигеҙ таштарын хасил итәләр. Халыҡ яҙыусыһы Әхиәр Хәкимовтың “Думбыра сыңы”, “Һауыр ҡумта”, Кирәй Мәргәндең “Бөркөт ҡанаты”, Булат Рафиҡовтың “Ҡараһаҡал”, Ғәли Ибраһимовтың “Кинйә”, Ғайса Хөсәйеновтың “Ҡанлы илле биш” кеүек романдары — быға асыҡ дәлил.

Халҡыбыҙҙың үткәндәге граждандлыҡ тарихын, ижтимағи-сәйәси тормошон, фәлсәфәүи, әхлаҡи-этик, рухи-эстетик аң кимәлен, шаҡтай теүәл, документаль-автобиографик юҫыҡта сағылдырыуға дәғүә иткән сығанаҡтар араһында, әллә ни күп булмаһа ла, яҙма рәүештәгеләре лә һаҡланған. Уларҙың төп өлөшөн йөкмәтке һәм форма йәһәтенән ярым тарихи, ярым әҙәби тәбиғәтле легенда, риүәйәт, хикәйәт, ҡисса, сәйәхәтнамә, ғарызнамә, тарихнамә, тәуарих кеүек ярым функциональ характерҙағы жанрҙарға ҡараған ҡомартҡылар тәшкил итә. Был сығанаҡтарҙың төп тәғәйенләнеше — үҙ заманының ижтимағи тормошо, тарихи хәл-ваҡиғалары һәм күренештәре, йолалары һәм ғөрөф-ғәҙәттәре тураһында логик һәм художестволы фекерләүгә нигеҙләнгән алым-саралар ярҙамында мәғлүмәт биреү, төшөнсә булдырыу.

Халыҡҡа үҙ ырыуҙарының әллә нисәмә быуынға тиклем тарихын белергә ярҙам иткән ярым функциональ характерҙағы тарихи-әҙәби сығанаҡтар араһында тәуарих, тарихнамә башҡорт, ғөмүмән, төрки халыҡтары һүҙ сәнғәтендәге боронғо жанрҙарҙан һанала. Ғәрәп, фарсы сығышлы “тәуарих” һүҙе үҙе үк “тарих” һүҙенең күплек мәғәнәһен аңлата. Тарих яҙыу традицияһы теге йәки был ырыуҙарҙың бер төбәктә берләшеп, халыҡ булараҡ артабан үҙаллы дәүләтселеген төҙөргә һәм үҫтерергә ынтылыусы формалаша башлауы этабында башланған. Тәуарихта ырыуҙар берлектәренең, халыҡтың, хатта бер нисә этнос йәшәгән региондың тарихы яҡтыртылған. Был жанр — ырыу-ҡәүемдәрҙең берләшеүе, иҡтисади, ижтимағи-сәйәси, мәҙәни мөхит берлеге ерлегендә тарихи аңдың юғарыраҡ баҫҡысҡа күтәрелә барыуының сағыу бер күрһәткесе ул. Әле ул саф тарихи хеҙмәт, фәнни трактат булыуҙан алыҫ. Был жанр тәбиғәте менән синкретик характерҙа. Төрлө жанрҙарҙың элементтарын файҙаланыу тәуарихсының ижади мөмкинлектәрен күпкә киңәйтә. Тәуарихта мифик, әкиәти күренештәр, уларға хас һүрәтләү алымдары, легенда, риүәйәт, мәҡәл, әйтем, хатта ҡобайыр кеүек фольклор жанрҙары һыҙаттары, урта быуаттарҙа киң таралыу тапҡан дини-агеографик әҙәбиәттең, айырыуса шәжәрә, ҡисса, хикәйәт, хикмәт кеүек жанрҙарҙың элементтары ҙур урын ала һәм фактик материалдар, тарихи-документаль сығанаҡтар ерлегендәге автор күҙәтеүҙәре менән йәтеш үрелеп, аралашып килә, ғилми-логик фекерләү менән образлы, әҙәби-художестволы фекерләү айырылғыһыҙ бер бөтөн күренеште хасил итә. Унда автор заманының энциклопедик ҡоласлы ижадсыһы булараҡ күҙ алдына баҫа. Ул тарихсы ла, географ та, астроном да, философ та, теолог та, библиограф та, фольклорист та һәм, әлбиттә, яҙыусы ла.

Ҡыҫҡаһы, заманына күрә киң ҡоласлы, ысын мәғәнәһендә тарихи-әҙәби тәбиғәтле, ғилми-художестволы биҙәкле тәуарих жанры халыҡҡа үҙ тамырҙарын юллауға, “асылын танып белеүгә”, системалы тарихи ҡараш формалаштырыуға ҙур этәргес биргән.

Үҙендә тарих жанрының да, шәжәрәнең дә айырым сифаттарын берләштергән, дини-мифологик, уйҙырмалылыҡ элементтарын күберәк һаҡлаған, бәйәнләүҙе әҙәм яралған дәүерҙән юлланған “дөйөм тарих”-тан башлаған, сағыштырмаса ҙур күләмле булмаған тарихнамә жанры ла урта быуаттарҙа халыҡтың ижтимағи-мәҙәни тормошонда тәуарих кеүек үк ҙур роль уйнаған. Әйтергә кәрәк, Урал-Волга төбәгендә тәуарих, тарихнамә жанрҙарына мөрәжәғәт итеү ошо региондағы төрлө ҡәүемдәрҙең, шул иҫәптән боронғо башҡорт ырыуҙарының, Болғар дәүләте ерлегендә берләшә, дөйөм рухи байлығын, уртаҡ яҙма мәҙәниәтен барлыҡҡа килтерә, ислам фәлсәфәһен, ҡанун-ҡағиҙәләрен үҙләштерә башлаған осорҙан башлана. Беҙгә болғар ғалимы һәм әҙибе Яҡуб ибн-Ноғмандың “Тәуарихи Болғария” тигән китап яҙыуы мәғлүм. Шунылы ҡыҙыҡ: уның традицияһын артабан тап башҡорттар араһынан сыҡҡан ғалим-яҙыусылар дауам иттерә. Хисаметдин Мөслимиҙең “Тәуарихи Болғария” (XVIII б.), Тажетдин Ялсығоловтың “Тарихнамәи болғар”

(XIX б. башы), Ғәли Соҡорой-Кейековтың “Тәуарихи Болғария, йәки Тәҡриби Ғари” (XIX б. аҙағы) тигән тарихи-әҙәби характерҙағы китаптары — шуның асыҡ миҫалы. Аноним “Сыңғыҙнамә” лә (XVI б.) улар рәтендәге популяр әҫәр. Унда урта быуат ғәрәп, фарсы, монгол, дөйөм төрки тарихи-әҙәби ҡомартҡыларына (Рәшит әт-диндең “Жәмәиғ әт-тәуарих”, Әбүлғазиҙың “Шәжәрәи төрк” һ.б.) мөрәжәғәт итеү күҙәтелһә лә, боронғо башҡорт шәжәрәләренә, легендаларына, риүәйәттәренә, ҡобайырҙарына ориентация тотоу, уларҙы ижади ҡулланыу күҙгә бәрелеп тора. Заманында был тәуарих халыҡ араһында киң популярлыҡ ҡаҙанған, уның тарихи ҡарашын, эстетик аңын үҫтереүҙә ҙур роль уйнаған. Тикмәгә генә ундағы айырым мотивтар артабан Т.Ялсығолов, Ғ.Соҡорой-Кейеков, М.Өмөтбаев, Ғ.Кейеков, Ш.Бабич әҫәрҙәренә килеп инмәгән.

Үткәндәге рухи байлығыбыҙ, уның халҡыбыҙҙың тарихи яҙмышын сағылдырыуҙағы, халҡыбыҙҙа тарихи аң тәрбиәләүҙәге роле тураһында һүҙ алып барғанда, уҙған быуаттарҙағы публицистик ҡомартҡыларҙы — олатайҙарыбыҙҙың ғилем эстәп, ислам тәғлимәттәрен ныҡлабыраҡ үҙләштерергә, был дин барлыҡҡа килгән изге ерҙе күрергә, башҡа илҡорҙар менән иҡтисади, мәҙәни бәйләнештәр урынлаштырырға тырышып, төрлө илдәргә сәфәр ҡылыуҙары ерлегендә барлыҡҡа килгән хажнамәләрҙе, сәйәхәтнамәләрҙе, төрлө кимәлдәге түрәләргә, батшаларға адресланған шикәйәтнамәләрҙе, ғарызнамәләрҙе, наказдарҙы, башҡорт ихтилалдары ваҡытында тыуған өндәмәләрҙе, фармандарҙы, хат-мәктүбтәрҙе (Исмәғил Бикмөхәммәт, Мөхәммәт Әмин, Тажетдин Ялсығол сәйәхәтнамәләре, Бәҙәрғол Юнаев һәм Туҡтамыш Ишбулатовтың Закондар проекты комиссияһына ебәргән наказдары, Салауат Юлаев, Кинйә Арыҫланов, Ҡасҡын Һамаров фармандары һәм өндәмәләре, Ғабдулла Ғәлиевтың (Батыршаның) батшабикә Елизавета Петровнаға яҙған хаты, башҡорттарҙың батшаларға яҙған ялыу-үтенес хаттары-шикәйәтнамәләре һ.б.) ситләтеп үтеү мөмкин түгел. Уларҙа халыҡтың социаль-тарихи хәле, үҙен үҙаллы этнос булараҡ таныу һәм танытырға ынтылыу ҡеүәһе, тарихи аңы, донъяға ҡарашы, мәҙәни кимәле, әхлаҡи-психологик йөҙө, милли һәм социаль азатлыҡ өсөн көрәше киң сағылыш тапты.

Халыҡтың ҙур тарихы, ҙур тарихи “олоно” тәрән тамырҙарҙан һәм уларҙың тамырсыҡтарынан башҡа мөмкин түгел. Халҡыбыҙҙың оҙайлы тарихын белергә, уны төрлө йәһәттән тулыландырырға, “һутландырырға” булышлыҡ иткән шундай тамырҙар араһында ярым функциональ характерҙағы шәжәрә жанры айырым бер урын алып тора. Ул иң боронғо жанрҙарҙан һанала. Заманында төрки ҡәүемдәрендә үҙ ырыу тарихын, уның яҙмышына бәйле хәл-ваҡиғаларҙы, ата-бабаларының исем-шәрифтәрен, башҡарған мөһим, данлы эштәрен телдән бәйәнләп, быуындан-быуынға тапшыра килеү ғәҙәте йәшәгән. Ошо тарих, хәл-ваҡиғалар, исемдәр теҙмәһе күбәйә һәм уларҙы иҫтә тотоу ауырлаша барған һайын хәтерҙә тотоуҙы, бер-беренә телдән тапшырыуҙы еңеләйтеү өсөн “тарих һөйләүҙе” ритм-рифмаға, йәғни шиғыр юлдарына һалыу традицияһы барлыҡҡа килгән. Аҡрынлап

шәжәрәне яҙма рәүештә теркәй башлағандар. Был традицияның ҡайһы осорҙарҙа барлыҡҡа килеүен киҫеп кенә әйтеүе ауыр. Шулай ҙа Урал-Волга регионына ислам дине, ғәрәп яҙмаһы үтеп инә барған һайын, яулап алыу поход-хәрәкәттәре, яңы дәүләттәр төҙөргә, булғандарын киңәйтергә йә бүлгеләргә ынтылыш, шул сәбәпле төрлө ҡәүемдәрҙең үҙ-ара буталыштары көсәйгән осорҙа, башҡорт донъяһында шәжәрәләрҙе теге йәки был ырыу тарихын, этнографик асылын, көнитмеш ерҙәрен конкрет, документаль дәлилләүсе сығанаҡ булараҡ яҙма рәүештә теркәп ҡуйыу традицияһы ныҡлап формалаша башлағанға оҡшай. Был традиция башҡорттар үҙ ирке менән Рус дәүләтенә ҡушылып, рус батшаһынан ҙур ғына иҡтисади-сәйәси хоҡуҡтарҙы гарантиялаған, ерҙәргә аҫабалыҡ хоҡуғын нығытҡан ярлыҡ-грамоталар алғас, тағы ла үҫә төшә. Үҙ ырыу шәжәрәһен белеү ниндәйҙер бер хөрмәтле намыҫ эше, рухи талап эше генә булып ҡалмай. Улар ысын мәғәнәһендә һәр ырыуҙың киләсәк яҙмышын, иҡтисади-сәйәси, рухи-мәҙәни тормошон билдәләшер, батша йә башҡа юғары чиновник алдында, күрше халыҡтар алдында теге йәки был ерҙәргә эйә булыу хоҡуғын, тарихи үткәнен, тамырҙарының тәрәнлеген, тереклеген һәм “бөйөклөгөн” конкрет дәлилләп, күрһәтеп бирешер ижтимағи-тарихи һәм сәйәси әһәмиәттәге документ ҡеүәһенә эйә була бара. Шуға ла шәжәрәләрҙе ентекләп яҙып барыу һәм күҙ ҡараһындай һаҡлау иң яуаплы, иң изге эштәрҙең береһенә әүерелә. Ул изге эште ил-ҡор башлыҡтары, улар ышанып ҡараған кешеләр, халыҡ араһында танылған уҡымышлы ил ағалары башҡарыр булып китә. Араларында танылған һүҙ оҫталары, ғалим-әҙиптәр ҙә осрай (мәҫәлән, Тажетдин Ялсығол, Ғәли Соҡорой, Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев, Ғарифулла Кейеков һ.б.). Беҙҙең көндәргә шәжәрәләрҙең XVI быуат тирәһенә тиклем үк яҙма рәүештә ныҡлы йәшәүен дәлилләүсе мәғлүмәттәр килеп еткән. Мәҫәлән, юрматы ырыуы шәжәрәһе тап XVI быуатта Тәтегәс бей тарафынан әйтелеп, яҙҙырылған.

Шәжәрәләрҙең урта быуаттарҙа ныҡлап яҙма рәүештә йәшәүен уларҙың төрлө-төрлө атамалар менән йөрөтөлөүе раҫлай: “тайра”, “нәсәпнамә”, “силсилә”, “нәсәпхат”, “шәжәрә”. Мәҫәлән, М.Өмөтбаев үҙенең “Йәдкәр” (1897) исемле йыйынтығында шәжәрәләрҙе “нәсәпнамә” атамаһы менән бирә. Шулай ҙа беҙҙең көндәргә килеп еткән ырыуҙар тарихтарын яҡтыртҡан яҙмаларҙа ғәрәп теленән ингән, тәржемәлә “ағас” мәғәнәһен биргән “шәжәрә” һүҙен ҡулланыу өҫтөнлөк итә. Был хәл, күрәһең, төрки ҡәүемдәрҙең, шул иҫәптән башҡорттарҙың, ғәрәп яҙмаһын, мәҙәниәтен һәм әҙәбиәтен, ислам дине ҡанундарын күп быуаттар буйына үҙләштереүе менән бәйле.

Барлыҡҡа килеү, йәшәү һәм таралыу рәүеше менән шәжәрә — коллектив ижад емеше, теге йәки был ырыуҙың быуындан-быуынға аманатлап тапшырылған тарих яҙмаһы ул. Уның барлыҡҡа килеүендә һәм йәшәүендә әллә нисәмә быуын вәкилдәре хеҙмәт күрһәткән. Шуға ла унда халыҡтың төрлө осорҙарҙағы тел-стиль мәҙәниәте, донъяға ҡарашы, тарихы, тормош-көнкүреше, фольклоры, ғөрөф-ғәҙәттәре, әхлаҡи-

этик, юридик мәсьәләләр, айырым кешеләрҙең тормош юлы һәм башҡалар хаҡындағы мәғлүмәттәрҙе табырға мөмкин. Мәҫәлән, үрҙә телгә алынған юрматы башҡорттарының шәжәрәһендә был ырыуҙың Рус дәүләтенә ҡушылыуына, биләгән ерҙәрен билдәләүгә һәм бүлеүгә, ниндәй ижтимағи ҡоролош шарттарында йәшәүенә бәйле мәғлүмәттәрҙе осратырға була. Шуныһы иғтибарҙы йәлеп итә: был мәғлүмәттәр шәжәрәлә ҡоро атап, теркәп үтеү рәүешендә генә түгел, ә төрлө хәл-ваҡиғаларҙы, эпизодтарҙы бәйәнләү, уларға хис-тойғо ҡатыш мөнәсәбәт белдереү солғанышында бирелә. Шуға ла унда художестволы фекерләү, образлылыҡ элементтары, хәл-ваҡиғаларҙы мауығып, хис-тойғоларға бирелеп китеп хикәйәләү, күренештәрҙе ентекле тасуирлау, сюжетлылыҡ ҙур урын тота. Ҡомартҡының юрматылар тарихының боронғораҡ осорон яҡтыртҡан баштағы өлөшөндә халыҡ мифологияһынан, фольклорҙан ингән сюжет линияһы өҫтөнлөк итә. Унда тарихта билдәле шәхестәр, этник атамалар, уларға бәйле ваҡиғалар, конкрет географик ерлек телгә алынһа ла, тарихилыҡ, документаллек самалы, уйҙырмалылыҡ, мифологик бәйәнләү үҙҙәрен ныҡ тойҙорта. Түбәндә килтерелгән өҙөк быға асыҡ миҫал булып тора: *“Чыңғыз хан заманындан калған ханлар мәғлүм булсын. Асыл юрматыларның уғланлары Тухал Шәғәли бейнең оруғы (ырыуы) күп өчөн барча халайыклар “бей” дәйеп әйтәләр. Борон заманда бу ердә нуғай ирде. Зәй, Шишмә дигән ерләрдә һәр тарафдан күчеп йөрөрләр ирде. Анча нәгаһ (капыл, көтмәгәндә) ул ердә аждаһа йылан пәйдә булды. Бер нисә көнлөк ердән ятар ирде. Моңар күп йыллар кичте, аның берлән орыш кылдылар. Күп халайык һәләк булды. Шундан суң ул йылан ғәйеп булды. Халайык аманда калды...”*[*]

Артабан шәжәрәлә һүҙ Урта Азия әмире Аҡһаҡ Тимерҙең Алтын Урҙа ханы Туҡтамышҡа ҡаршы ойошторолған походы, 1391 йылдағы был яуҙың башҡорт иленә ҙур бәлә-ҡазалар килтереп, ҡырғын булып үтеүе хаҡында бара. Унда был ваҡиғаларға тиклем үк Алтын Урҙала барған власть, тәхет өсөн көрәш, һарай интригалары, шуларҙың уртаһында ҡайнаған Әмәт Хәмәт, Йәнебәк хандарға бәйле ваҡиғалар ҙа яҡтыртыла. Шәжәрәнең был өлөшөндә тарихи дөрөҫлөк өҫтөнлөк ала башлағандай була. Әммә бында ла әле ваҡиғалар бары дөйөм рәүештә хикәйә ителәләр, улай ғына ла түгел, уйҙырма, легенда элементтары менән аралаштырып ебәреләләр. XIV быуаттың икенсе яртыһында — XV быуат башында Урал-Волга регионында булған, тарихи сығанаҡтарҙа, “Ғайса улы Әмәт” ҡиссаһы ише яҙма әҙәби ҡомартҡыларҙан сағылыш тапҡан тарихи ваҡиғалар, ил-ҡор башлыҡтары араһындағы мөнәсәбәттәр документаль теүәллек менән теркәлмәй, уларҙың сәйәсәте, тотҡан маҡсаттары, һуғыштарҙың сәбәптәре һәм эҙемтәләре, уларҙа ҡатнашыусы яҡтарҙың көстәре, стратегияһы һәм

---

[*] Шәжәрәнән алынған был өҙөк, тарихи яҙмаларҙың урта быуаттарҙағы тел-стиль тәбиғәте нисегерәк булырын күҙ алдына баҫтырыу маҡсатынан сығып, нөсхәләге тел-стиль үҙенсәлектәрен һаҡлаған килеш бирелде.

тактикаһы аңлатылмай. Ҡыҫҡаһы, был шәжәрәнең күп кенә өлөштәре тарихи-документаль сығанаҡты төҫмөрләтеүгә ҡарағанда, әҙәби ҡомарҡы өҙөктәрен хәтерләтә.

Ғөмүмән, үҙҙәрендә документаллек, фактология элементтарын, конкрет тарихи хәл-ваҡиғаларға, күренештәргә, шәхестәргә бәйле мәғлүмәттәрҙе, художестволы һынландырыуҙың хикәйәләү, һүрәтләү, тасуирлау, диалог кеүек алым-сараларын, сюжетлылыҡ күренештәрен тотоуҙары, айырым осраҡтарҙа төҙөүсе йәиһә төҙөтөүсе авторҙары билдәле булыуҙары менән шәжәрәләр, академик Ғ.Хөсәйеновтың бик дөрөҫ әйтеүенсә, урыҫ йылъяҙмаларын хәтерләткән тарихи-әҙәби ҡомарҡылар булып тора. Әйтәйек, үрҙә телгә алынған юрматылар шәжәрәһенән тыш, мең, бөрйән, ҡыпсаҡ, үҫәргән, табын, тамъян, әйле һәм башҡа ырыу шәжәрәләрендә беҙ уларҙың тарихын, мауыҡтырғыс итеп хикәйәләү, художестволы-тасуири саралар һәм алымдар — стилистик фигуралар, һүҙ ҡабатланыштар, йәнле диалогтар һәм монологтар, халыҡсан телмәр саралары ярҙамында йәнле итеп яҡтыртырға ынтылыу осраҡтарына тап булабыҙ. Улар асылы менән тарихи-документаль тәбиғәтле, логик фекерләүгә ҡоролған ҡоро стилле булырға тейешле шәжәрәләргә йәнлелек, аһәңлелек бирә. Беҙҙең көндәргә 1846 йылдағы күсермәһендә килеп еткән меңле башҡорттары шәжәрәһендә, мәҫәлән, халыҡтың йәнле һөйләү телмәренә, диалог алымына, фольклор мотивтарына һәм жанрҙарына, атап әйткәндә мәҡәл һәм әйтемдәргә (“Илен ҡурсыған ил ағаһы булыр, илен борсоған ил буҫағаһы булыр” һ.б.) мөрәжәғәт итеү, дидактизм элементтарын ҡулланыу көслө. Әҙәбиәт белгесе М.Нәҙерғолов хаҡлы: бында шәжәрә авторының үҙ замандаштарын, киләсәк быуын вәкилдәрен тарихҡа хөрмәт менән ҡарарға, атай-олатайҙар тормошонан хәбәрҙар булырға саҡырыуы, патриотик тойғолары асыҡ яңғырай.

Беҙҙең көндәргә килеп еткән шәжәрә текстарынан күренеүенсә, улар башлыса сәсмә формала ижад ителгәндәр. Шулай ҙа ҡайһы бер шәжәрәләрҙә прозаик текстың шиғри текст менән аралашып, үҙ-ара үрелеп китеүе лә күҙәтелә. Шәжәрә туҡымаһына ингән поэтик юлдар үҙҙәренең эшләнештәре, ҡалып-формалары менән башлыса халыҡтың ауыҙ-тел ижадына барып тоташа, теленең, ритм-рифмаһының аһәңлеге һәм ябайлығы менән айырылып тора. Был йәһәттән үҫәргән ырыуының бер тармағы булған Мәмбәт араһы шәжәрәһе иғтибарға лайыҡ. Унда проза менән яҙылған өлөштәр халыҡтың оҙон йырҙары, хитап стилендәге шиғри юлдар менән аралашып бара. Дәлил өсөн шәжәрәнән алынған ике генә строфаны килтереп китәйек. Беренсеһе:

Ер һатмағыҙ, башҡорттар,
Ерҙәй дәүләт һис тә юҡ.
Һәммә мәғдән ерҙән сыға,
Ерҙең ҡәҙере беҙҙә юҡ.

Икенсеһе:

Буҙға ғына буҙра бурыл атым,
Буйра ғына яллы бүртә атым.
Һөйгән генә йәрем — минең ай дәүләтем,
Ағай-энем — минең ҡанатым.

Сәсмә юлдарҙың шиғыр менән аралашып килеүе үҫәргән ырыуы шәжәрәһенең бер вариантында ла һаҡлана. Ә бына уның “Башкирские шежере” (1960) китабында баҫылған варианты тулыһынса теҙмә формала. 178 юлдан торған был шиғри шәжәрә үҙенең стиле, ритм-рифмаһы менән ҡобайырға ауаздаш.

Был мәҡәләлә беҙ ҡыҫҡаса ғына рухи мираҫыбыҙҙа тарихыбыҙҙың, тарихи аңдың үҙенсәлекле, энциклопедик ҡоласлы сағылыш табыуын, һүҙ сәнғәте ҡомартҡыларының, айырыуса ярым функциональ жанрҙарға ҡарағандарының, тарихи-ижтимағи һәм художестволы-эстетик әһәмиәте хаҡында һүҙ алып барҙыҡ. Бында был ярым функциональ характерҙағы ҡомартҡыларҙың жанр-стиль тәбиғәте, идея-художество үҙенсәлектәре, башҡорт прозаһын, айырыуса тарихи прозаны, барлыҡҡа килтереүҙәге ролдәре тураһында ла һүҙ йөрөтөргә булыр ине. Ул мәсьәләгә ентекле туҡталып тормаҫтан, бер моментты билдәләп үтке килә. Сөнки ул да беҙҙең милли тарихи ҡарашыбыҙҙың формалашыуы һәм үҫеү юлын күҙ алдына килтерергә булышлыҡ итеүсе һәм хәҙер ҙә был процесҡа этәргес биреүсе фактор. Бөгөнгө көнгәсә килеп еткән яҙма ҡомартҡылар, айырыуса шәжәрә, тәуарих, тарихнамә, мәктүб, сәйәхәтнамә, хажнамәләр, беҙҙең аңыбыҙға оҙаҡ йылдар һуҙымында һеңдерергә тырышылған “башҡорттарҙың совет осоронa тиклем яҙмаһы, яҙма мәҙәниәте булмаған” тигән фекерҙе тулыһынса инҡар итеүҙәре менән уларҙың күп быуаттар буйына яҙма мәҙәниәте формалашыуы һәм үҫеүе хаҡындағы объектив тарихи ҡараштың аяҡҡа баҫыуына һәм нығыныуына ла булышлыҡ итәләр. Улар ҡан ҡәрҙәштәребеҙҙең бай фольклорлы ғына түгел, яҙмалы, китаплы халыҡ булыуын иҫбатлауҙары менән ҡиммәт. Ундай байлыҡҡа оло тарихлы, тәрән рухи тамырлы ҡәүем генә эйә. Ана шул тәрән тамырҙарыбыҙҙы ҡоротмаҫ, милли тарихи аңыбыҙҙы юғалтмаҫ өсөн рухи мираҫыбыҙҙы ла, бөгөнгө әҙәби ҡаҙаныштарыбыҙҙы ла яҡшылап барлап, уҡый-өйрәнеп барырға, ижад итергә, фәнни хеҙмәттәр яҙырға, шәжәрәләр, тәуарихтар, тарихнамәләр яҙыу традицияларын дауам итергә кәрәк. Ни генә тимә, был килеш кенә ҡан ҡәрҙәштәрең, ырыуҙаштарың, халҡың тураһындағы тарихи мәғлүмәттәрҙе тулы көйө хәтергә уйып, иҫтә ҡалдырып булмай. Уның үҙең менән мәңгелеккә китеү аянысы ла бар бит әле. Ә бына тарихи сығанаҡтарҙа, шәжәрәләрҙә теркәлгән мәғлүмәттәр киләһе быуындарға барып етә, артабан үҫтереүҙе талап итә, эҙләнеүҙәргә этәргес бирә. Былдай изге эшкә халҡы яҙмышын ҡайғыртҡан, уның киләсәгенә өмөтөн юғалтмағандар тотона. Ундай кешеләребеҙ ни тиклем күберәк булһа, халҡыбыҙҙың милли-тарихи аңы, кешелек донъяһында үҙ урынын табыуы һәм һаҡлауы, үҙ бәҫен белеүе кимәле лә шул тиклем юғары һәм көслө буласаҡ.